Барлыҡ йыуанысым шиғырҙарҙа,

Бар бәхетем халҡым телендә.

Рәми Ғарипов

Рәми Ғарипов

Рәми Ғарипов – Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты

Шағирҙың тормош юлы

Рәми Ғарипов 1932 йылдың 12 февра-
лендә Башҡортостандың Салауат районы
Арҡауыл ауылында тыуған.

Тыуған ауылында ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Өфөнөң 9-сы һанлы мәктәбендә уҡыуын дауам итә.

1950-1955 йылдарҙа Мәскәүҙә Максим Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында уҡый.

1955-1958 йылдарҙа Өфөлә «Совет Башҡортостаны» гәзитенең, «Ағиҙел» журналының, Башҡортостан китап нәшриәтенең редакцияларында эшләй.

1959-1964 йылдарҙа Рәми Ғарипов тыу-
ған яҡтарында йәшәй, «Йүрүҙән» исемен-
дәге колхоздың комсомол ойошмаһы сәр-
кәтибе булып эшләй.

1964-1966 йылдарҙа «Совет Башҡортос-
таны» газетаһының, 1968-1972 йылдарҙа
«Башҡортостан ҡыҙы» журналының ре-

Рәми Ғарипов 1977 йылда вафат була. Тыуған ауылында һәм Өфөлә, ул уҡыған мәктәптәрҙә музейҙар асылған.

1992 йылда Рәми Ғариповҡа Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелә.

Өфөлә Рәми Ғарипов уҡып киткән гимназия-интернат уның исемен йөрөтә

Барлыҡ йыуанысым шиғырҙарҙа,
Бар бәхетем халҡым телендә.
Халҡым ҡалһа, әле мин ҡалырмын,
Һүҙем йәшәр әле илемдә.

Рәми Ғарипов

Ижады

Рәми Ғарипов 50-се йыл-
дарҙа ижад итә башлай.
1954 йылда сыҡҡан «Йү-
рүҙән» исемле шиғырҙар
йыйынтығы йәш студент-
тың диплом эше була.
Әҙәби ижад, тәржемә
эше менән ул актив
шөғөлләнә.

Китаптары

«Йүрүҙән» - 1954; «Таш сәскә» - 1958;
«Һабантурғай йырҙары» - 1964;
«Осоу» - 1966; «Аманат» - 1969;
«Миләш-кәләш» - 1974; «Йондоҙло уйҙар» - 1979; «Умырзая йыры» - 1981;
«Возвращение» - 1981;
«Минең антологиям» - 1990;
«Алырымҡош менән Бирмәмҡош» - 1992;
«Ғүмәр Хәям» - 1993.



Шағир – бер тамсыһы икән үҙ халҡының,
Тамсы һөйләр диңгеҙ хаҡында.
Шағир – шаңдағы ул заманының.
Һәм көсө лә уның халҡында.

Рәми Ғарипов «Шағир»

Туған тел

Мин халҡымдың сәскә
күңеленән,
Бал ҡортондай, ынйы йыямын,
Йыямын да – йәнле ынйыларҙан
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.
Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:
Бер телдән дә телем кәм түгел –
Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,
Кәм күрер тик уны кәм күңел!..

Аманат

Телең барҙа илең бар,
Илең барҙа иркең бар,
Иркең барҙа күркең бар,
Ил биҙәргә дәртең бар,
Ереӊ, күгең – икең бар,
Утың, һыуың – дүртең бар.
Дүрт терәктең дүртеһен дә
Тыуып үҫкән ил бәйләй;
Ил яҙмышын ир муйынына
Ҡылды ярыр тел бәйләй,
Ҡырҡҡа ярыр тел бәйләй!..

Фотоһүрәттәр һөйләй...



Рәми Ғарипов ҡатыны Надя, улдары Салауат һәм Азамат менән